*Әхмәт* ***СӨЛӘЙМӘНОВ***

# Ул хыялдарға бай ине

*Уҡыған сағығыҙҙы хәтерләгеҙ әле. Шундай уҡытыусылар була: һин уларҙың дәресен тыңлайһың, мәғлүмәтеңде арттыраһың. Аҙаҡ, бигерәк тә йылдар аша кире боролоп ҡараһаң, шуны аңлайһың: тыңлап, мәғлүмәт алғанһың, ә һабаҡ ала алмағанһың. Уларҙан өмөт иткән һабаҡты һиңә йыш ҡына тиңдәшең, йә һинең кеңек уҡ уҡып йөрөгән икенсе берәү мулыраҡ биргән булып сыға. Үҙе лә һиҙмәҫтән. Ошо хаҡта уйлағанымда, һәр саҡ университет йылдарым хәтергә килә. Беҙ студент саҡта ла бар ине һабаҡ бирмәй, дәрес кенә биреп йөрөүселәр. Дәрес бирмәһә лә, һабаҡ биреүселәр ҙә әҙ түгел ине... Әле ана шул һуңғыларының береһе хаҡында белгәнемде бәйән итмәксемен.*

## 1. Ҡуңыр йөҙлө студент

Дәрес бирмәһә лә, үҙенең булмышы, эшмәкәрлеге менән өнһөҙ һабаҡ биреүсе “әҙ түгел”дәрҙең береһен 1961 йылда, Башҡорт дәүләт университетының тарих-филология факультетында уҡый башлаған мәлдә осраттым мин. Ул еңел кәүҙәле, йәшкелт күҙле, ҡуңыр йөҙлө теремек егет ине. Уҡыу залдарында йыш күрә инем мин уны. Күргән һайын ул йә библиографик картотека менән танышып тора, йә берәй тынысыраҡ урында мөкиббән китеп, ниҙер уҡып ултыра. Эргәһендәге китаптар өйөмө артынан башы саҡ күренә. Ятаҡханабыҙ менән университет араһындағы һуҡмаҡта осрағанда, ҡулында карточкалар тыңҡыслап тултырылған тартмаһынан уның уҡыу залынан ҡайтып килгәнен белергә була ине.

— Кем ул? — тип һораным бер мәл арабыҙҙа оло бәйелле булыуы, олоһон-кесеһен айырып тормай, тиҙ аралашыусан шәриҡтәшем Вафа дуҫым Әхмәҙиевтан. Һорамаҫ та инем, уҡыу төркөмөндә, декан урынбаҫары уҡытыусыбыҙ Ғәли Сәйетбатталов әйтмешләй, деканат вәкиле, йәғни староста бул да шәриҡтәш ҡыҙҙарың янында кем ураланғанына битараф булып ҡара! Ә был ҡуңыр йөҙ беҙҙең данлыҡлы “Кирова семь” тигән ятағыбыҙҙағы ҡыҙҙар корпусына, етмәһә, төркөм комсоргы янына, уҡыу башынан уҡ һуҡмаҡ һалып өлгөргәйне инде. Алғараҡ китеп әйтәйем, йыл да үтмәне, уҡыу төркөмөбөҙҙөң комсоргы Венера Яхина менән шул ҡуңыр



егеттең туйы булды. Беҙҙең курстағы тәүге туй ине был. Шул замандан алып һабаҡташтарымдың барыһы ла теге ҡуңырға еҙнә, тип кенә өндәшер булдыҡ. Ә теге саҡта һәр нәмәне алдан ишетеп, алдан белеп тороусан, халыҡса әйткәндә, торғаны — оҙон ҡолаҡ, осло күҙ Вафа дуҫым:

— Ырымбур егете бит ул. Урыҫ бүлегенең дүртенсе курсында уҡый. Беҙҙең Венерабыҙ менән Мораҡ педучилищеһында бергә уҡыған. Исеме Зиннур булыр. Фамилияһы — Ураҡсин, — тигәйне.

## 2. Уймак хикәйә — ҡоймаҡ

Вафабыҙ Ғ.Сәләм, Мостай Кәримдәр студент замандарҙа уҡ ойошторолған, хәҙер "Шоңҡар" тип йөрөтөлгән, теге мәлдә иһә исемһеҙ көйө атҡаҙанған әҙәби ижад түңәрәге буйынса ла белеүе бар ине ҡуңыр йөҙлө теге талипты. Беренсе генә курста булһа ла, Вафаны был түңәрәктә көслө шағир тип тә, башҡаларҙың әҫәрҙәрен ҡаты тәнҡитләүсе тешле тәнҡитсе тип тә танып өлгөргәйнеләр инде. Оҙаҡламай шул ижад түңәрәгенең "Йәш әҙәбиәтсе" тигән стена гәзитендә "Зиннур Ураҡсин" тигән имзалы материалдар күренә башлағайны инде. Ул егет быға са беҙ уҡып күнекмәгән жанр өлгөләре менән сығыш яһай ине. Рәсәй Фәндәр академияһы Өфө ғилми үҙәгенең Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтында бергә эшләй башлағас, бер ултырҙаш булғанда, шул саҡтарҙы хәтерләп, Зиннур Ғәзиз улы шулай тигәйне:

— Бындай әҫәрҙәр ни өсөндөр беҙҙә үҫеш алмағайны. Фарсы теллеләрҙә һәм көньяҡтағы төркиҙәрҙә борон-борондан билдәле булған. Минең шулай ҡыҫҡа-ҡыҫҡа хикәйәләр яҙып маташҡанды Рәми ағай Ғарипов белеп ҡалған. Әллә берәйһе әйткән, әллә "Йәш әҙәбиәтсе"лә баҫылғанды уҡыған: "Килтер әле!" — тине. Алып барҙым. Ул саҡта Матбуғат йорто эргәлә генә, хәҙерге Башавтоинспекция урынлашҡан йортта ине. Рәми ағай "Совет Башҡортостаны"нда әҙәби бүлектә эшләй ине. Уҡып сыҡты ла: "Бара! Тик жанрын нимә тип атайбыҙ?" — тине. "Ҡыҫҡа хикәйәләр" йә "кескәй хикәйәләр" тимәһәк?" — тим. Рәми ағай ниҙелер бизмәнләгән һымаҡ: "Ҡыҫҡа, кескәй... Кескәй, ҡыҫҡа... — тип ултырҙы-ултырҙы ла, — әйҙә, "уймаҡ хикәйәләр" тип кенә атайыҡ. Ризаһыңмы?" — тине. "Риза", — тинем.

Ана шулай башҡорт әҙәбиәтендә яңы жанр барлыҡҡа килә. Уға, үҙенең ҡыҫҡа ғүмере эсендә үк халыҡтың һөйөклө шағиры булып танылһа ла, рәсми дан-шөһрәт билдәләрен — халыҡ шағиры титулын да, республикабыҙҙың Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты тигәнен дә, үҙе үлгәс кенә бирҙеләр (ни хәл итмәк кәрәк, беҙ, белекһеҙҙәр, метаморфоза ҡанунына күнеккән бәндәләр бит: дан-шөһрәткә лайыҡлыларҙың ҡәҙерен тере сағында түгел, улар үлгәс кенә беләбеҙ, тере сағында һәм юғарыла ултырғанында, ҡул осонда йөрөтөлгәндәрҙе иһә, күтөп кенә торғандай, ул үлгәс тә, йә постан төшкәс тә хурларға тотонабыҙ). Яңы тыуған сабыйға исем ҡушҡан мулла һымаҡ, Рәми Ғарипов бына шулай Зиннур Ураҡсиндың ижади илһамы тыуҙырған, беҙҙең әҙәбиәтебеҙҙәге өр-яңы жанрға исем ҡушып, уға үҙе фатиха бирә. Шул фатихаһын студент Зиннур иңенә ҡанат ҡуйыу менән бер кеүек ҡабул иткән.

Ураҡсиндың уймаҡ хикәйәләрен уҡығас, авторҙың күҙәтеүсәнлегенә хайран ҡалаһың. Башҡаларҙың күҙенә бигүк салынмаған, салынһа ла, уларҙы уйландырмаған, уйландырған сүрәттә лә, шуны фәһем алырлыҡ итеп аңлата алмаған хәл, күренештәр тураһында яҙа ул. Сабыйҙың, тәүгә ай-һай тороп, бе-

ренсе аҙым яһауы ла, әсәнең үҙ балаһын иркәләүе лә, ағас яраһынан һут тамып тороуы ла, сүп-сар үләндең һин уйламаған ерҙә ҡалҡып сығыуы ла, башҡаһы ла — һәр кемебеҙгә таныш күренештәр. Ҡарамаҡҡа, З.Ураҡсин үҙенең уймаҡ хикәйәләрендә шул ҡәҙимге күренештәрҙе теркәп кенә сыҡҡан кеүек. Эйе, "кеүек" кенә. Әммә уның "теркәгәнен" уҡып сыҡтыңмы, уйланырға, хисләнергә мәжбүр булаһың. Хикмәт шул таныш күренештәрҙе нисек "теркәүҙә", әлбиттә. "Сүп-сар" тигән уймаҡ хикәйәһен генә алып ҡарайыҡ. Һүҙ унда билсән, алабута, сырмалсыҡтарҙың, йылдар буйы күмелеп ятып та, тупраҡ йомшартылыу менән, ҡалҡып сығыусанлығы хаҡында бара. Ботаник, агроном күҙәтеүеме ни! Әммә автор шул күренеште тасуирлау менән генә сикләнеп ҡалмай, һәләк фәһемле һығымта яһай: "Эйе, сүп-сар әрһеҙ була инде ул..."

Ураҡсиндың тәүге уймаҡ хикәйәләрендә үк үҙәк урында әхләҡ, матурлыҡ, хәтер кеүек проблемалар күтәрелә. Автор үҙ ҡарашын уҡыусыға көсләп таҡмай. Шул уҡ ваҡытта, һүрәтләнгәндән уҡыусыла төрлө ассоциациялар тыуыуы ихтимал, тигән кеүек: "Яралар тиҙ генә уңалмай шул" ("Яра"); "Япраҡтарҙың да үҙ ваҡытында ҡойолоуы яҡшы икән" ("Ҡойолмаған япраҡтар") тигәнерәк һығымталар менән төйнәп тә ҡуйғылай үҙ фекерен. Күптәрендә һығымта яһауҙы уҡыусының үҙ ихтыярына ҡалдыра. Ана шуға күрә үҙ һығымталары ла көсләп тағылған фекер түгел, бары авторҙың: "Мин шулай уйлайым. Ә һеҙ?" — тип әйтеүе кеүек кенә ҡабул ителә.

Рәми ағай теге мәлдә Зиннур Ураҡсиндың яҙмалары менән танышҡас, уларға "хикәйә" һүҙен дә эсенә алған жанр атамаһын бушҡа ғына бирмәгән. Ысынлап та, улар күләме йәһәтенән уймаҡ ҡына булһалар ҙа, оҙон-оҙон хикәйәләргә һыйғыһыҙ йөкмәткеле.

Зиннур Ураҡсиндың уймаҡ хикәйәләренең хикәйә жанры менән йәнә бер уртаҡлығы бар. Эш шунда: уларҙа күренеш кенә тасуирланып ҡалмай, ваҡиғалар ҙа һүрәтләнә, әммә йәйелмәйенсә, ыҡсым ғына итеп. "Әсә ҡулдары" тигәнендә, мәҫәлән, баҡсала бер әсәнең сабый иркәләүен тасуирлай ҙа, шул күренеш тәьҫирендә, өләсәһенән ишеткән нәсихәтте (притча — хикмәт) хәтеренә ала. Унда имсәк имер дәүерендә генә инәһенән айырылған бала, йылдар үткәс, тәненә ҡағылған ҡулдарҙың эйәһе әсәһе икәнен таный. Күргәне менән ишеткәне автор күңелендә бергә ҡушыла ла уны әсә ҡулдары хаҡында фәлсәфәүи һығымта яһауға килтерә: "Бала өсөн әсә ҡулдарынан да йомшаҡ, наҙлы, хәстәрле ни бар икән һуң донъяла?"

Башҡорт әҙәбиәте тарихында шундай бер фәһемле миҫал бар. Заманында күренекле прозаик булып танылып, әле лә бәҫен юғалтмаған әҫәрҙәр тыуҙырған Имай Насыри әҙәбиәткә шәлкем-шәлкем шиғырҙары менән килеп инә. Нәфис һүҙ һөйөүселәр: "Башҡорт әҙәбиәте тағы бер шағирға байыны!" — тип һөйөнөргә лә өлгөрмәй ҡала, йәш әҙип нәҫер жанрын үҙләштерә һалып ала. Ҡәҙимге нәҫер ваҡиға, хәл-күренештең үҙен түгел, ә улар тыуҙырған хис-тойғоға, йәғни шиғыр кеүек үк лирикаға ҡоролһа, был жанрға ул сюжет элементы индерә, уны новеллизм билдәләре менән байыта. Шулай, күперҙән күпергә, баҫҡыстан баҫҡысҡа күскәндәй булып, шиғырҙан — нәҫергә, нәҫерҙән — хикәйәгә, хикәйәнән — повесть жанрына, унан романға күсә. Китап һөйөүселәр үҙенсәлекле сәсмәүер оҫтаһы тип таныған Имай Насыри тигән әҙип әҙәбиәт донъяһында бына шулай урын ала. Әҙип булараҡ Зиннур Ураҡсин ижадының да эволюцияһы шулай булмаҡсы, тип яҙғайным уға алтмыш тулғанда. Ул дәүерҙә үк шулай тип әйтергә

ерлек бар ине. Ысынлап та, ул да тәүҙә шиғырҙар яҙа, шунан — уймаҡ хикәйә. Артабан эпик хикәйә һәм повесть жанрын уңышлы үҙләштерә башлағайны. Вафатынан әҙ генә алдараҡ донъя күргән “Аҡтау”, “Яугир”, “Мәрмәр баҫҡыстар”, “Тупһа”, “Баҡыртау” повестары, ошо әйтелгәнде хуплағандай, иш янына ҡуш ине. “Ҡарат”, “Ҡаруанһарай” романдары иһә Зиннур Ураҡсиндың ижади үҫеш юлының Имай Насириҙыҡы менән оҡшашлығын тағы бер иҫбатлап, шуны йөпләп ҡуйғандай. Тик шуны ла өҫтәп әйтмәй булмай. Ураҡсиндың хикәйәләүе ыҡсым, новеллистик башланғыслы булыуы менән айырылып тора. Күрәһең, күләме йыйнаҡ булһа ла, фекер тығыҙлығы менән айырылып торған уймаҡ хикәйә ижад итеү тәжрибәһе эпик киңлектәрҙе үҙләштергәнендә лә үҙенекен иткән. Ошо урында ирекһеҙҙән халҡыбыҙҙың моңло-зарлы классикаһынан “Ғүмәров” тигән йырҙағы:

“Әҙҙе лә генә һөйләп, күпте аңлатҡан
Ғүмәров та кеүек ир ҡайҙа?” —

тигән һүҙҙәр хәтергә килә һәм улар ҡолаҡ төбөндә:

“Әҙҙе лә генә һөйләп, күпте аңлатҡан
З.Ураҡсин кеүек ир ҡайҙа?” —

булып яңғырағандай итә лә, уны юҡһыныу тойғоһон тағы ла көсәйтә төшә.

## 3. Эпик киңлектәрҙе иңләгәндә

Зиннур Ураҡсиндың эпик әҫәрҙәренең ҡайһыһын алма, улар үҙҙәренең документаль нигеҙе, тимәк, тормошсанлығы, шул уҡ ваҡытта художестволы яҡтан оҫта дөйөмләштерелеүе менән айырылып тора.

Ә “Аҡтау” повесы, мәҫәлән, бер тояғы беҙгә Мөхәмәтсәлим Өмөтбаевтың, исеменә — еселе, тип әйтмәле “Йәдкәр” (Ҡазан, 1897; Өфө, 1984) китабында бирелгән “Аҡташ хан”, “Ҡанлыгүл” тигән яҙмаһы (һуңғыһының бер версияһын 1962 йылда Архангел районы Ҡыҙыл Яр ауылында Миндияр Дилмөхәмәтов дуҫ менән ошо юлдарҙың авторына ла яҙып алыу насип булғайны), халыҡ шағиры Мәжит Ғафуриҙың “Хан ҡыҙы Алтынсәс” (Ғафури М. Әҫәрҙәр: 6 томда. Өфө, 1953. 2-се том. — 297—302-се бб.) хикәйәһе аша сала-сарпы килеп еткән “Аҡташ” эпосына таянһа, икенсе тояғы автор үҙе етәкселек иткән институттың археологтары юлыҡҡан ҡомартҡыларҙы, өсөнсөһө автор фантазияһына терәлгән таймаҫ тағанды хәтерләтә. Тик Өмөтбаев һәм Ғафуриҙарҙың яҙмаларынан айырмалы рәүештә, “Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу”, “Таһир менән Зөһрә”, “Һуңғы йыр”, “Йософ менән Зөләйха”, “Буҙегет” ише иртәк һәм дастандарҙағыса, сюжетҡа этәргес көс роле мөхәббәт, аныҡлырағы, мөхәббәт өсмөйөшө өлөшөнә төшә, әлбиттә. Тик Зиннур ошо өсмөйөш хасил иткән конфликтты башҡаса (терминдар менән уйнарға яратыусылар был урында, моғайын, новаторҙарса, тип әйтер һәм хаҡлы булырҙар ине) хәл итә. Повеста батша ҡыҙы Зилбәр үҙенә ғашиҡ булған баш сардар Ранурҙы түгел, дошман яҡтың яу башы Сарыханды үҙ күрә.

“Яугир” повесын Ураҡсин Бөйөк Ватан һуғышы ветераны, данлыҡлы 112-се башҡорт атлы дивизияһы яугиры Әнүр Хатип улы Насиров хәтирәләренә нигеҙләнеп яҙһа, “Мәрмәр баҫҡыстар” повесы яҙыусының үҙ заманы хаҡында бәйән итә. Ундағы һәр баҫҡыс, һәр персонаж уның замандаштары һәм коллегалары өсөн таныулы. Һәр хәлдә, армиянан ҡайтышлай университетҡа инеүсе Зиннәт йөҙөндә авторҙың үҙ һыны, төҫө, ҡылығы — бар булмышы менән күҙ

алдына килеп баҫа. Унының һабаҡташтары йә аралашҡандарынан отличник Ильяс Ишҡолов, Урал аръяғынан килгән Басир Әхмәҙиев, һүрәт эшләүгә маһир Эдуард Ишкинин, комсорг Азамат Даминов, түрә-ҡара тирәһендә ураланыуы арҡаһында алдында “бөтәһе лә әҙер, юлдар асыҡ: аспирантура, журналдарҙа мәҡәләләргә юл, университетта йылы урын” алыусы Альберт Баҡыев, педагогия училищеһында бергә уҡыған, әммә, сәләмәт көйөнсә армияла булмауы арҡаһында, күптән талип булып өлгөргән Ғәйнулла, моторист Ришат Ҡарамов, Никифор Ильбулатов ишеләрҙең прототиптарын әле лә БДУ-ла йә Зәйнәб Бейешева исемендәге Стәрлетамаҡ дәүләт педагогия академияһында, йә бүтән вуз, мәктәп коридорҙарында осратырға була.

Зиннәттең уҡытыусыларынан Нина Васильевна, Соломон Давыдович, профессор Ғиниәтов, Зарипов Тәлғәт Мөҡсим улы, Вәли Вәлиевич, Шәйхуллин, Волков һ.б. — бөтәһе лә таныулы. Әҙип хатта буласаҡ кәләшенә лә, унының әхирәте менән дуҫлашыусыға ла, йәғни ошо юлдарҙың авторына ла урын тапҡан.

Дөйөм алғанда, был повесть XX быуаттың 60-сы йылдарына хас атмосфера менән һуғарылған. Унда БДУ тигән изге йорттоң белем һәм ғилем усағы ғына түгел, кисәге ауыл балаларынан дуҫлыҡ, берҙәмлек, татыулыҡ, остаздарҙы ихтирамлау кеүек сифаттарға эйә булған белгестәр әҙерләүсе инеш, сығанаҡ икәне матур асылған.

“Баҡыртау” менән “Тупһа” повестарын уҡығанда ла үҙеңде күптәнге таныштарың араһында йөрөгәндәй хис итәһең.

Повестары менән сағыштырғанда, “Ҡарат” романы автор фантазияһының муллығы менән айырылып тора. Шулай ҙа унда авторҙың тарихсыларға ғына хас архив материалдарын ихлас өйрәнеүенә төшөнәһең. Унының сюжеты тарихи Башҡортостандың көньяғында аҫаба башҡорт ерҙәренән мул ғына өлөш сәлдереп, эре ер биләүсегә әүерелеүсе, фольклорға Тимаш баяр исеме менән ингән тарихи шәхес Егор Николаевич Тимашев тигән алпауыт ҡорған мутлыҡтар тирәләй үрелә. Бында беҙ башҡорт ғәскәрҙәрен Урта Азияла йәшәүсе үҙ мөьмин мосолмандарыбыҙға ҡаршы атландырыусы генерал-губернатор Перовскийҙы ла, милләттәштәребеҙ араһында “Ғәҙел Даль” тигән лаҡап-исем алған мәшһүр лексикограф-яҙыусы һәм А.С.Пушкиндың яҡын дуҫы Владимир Даль менән дә осрашабыҙ. Ураҡсин Далдең Мең башҡорттары араһына килеүен, бында “Заятүләк менән Һыуһылыу” иртәген ишетеүен, шул сюжет нигеҙендә “Башкирская русалка” тигән яҙмаһы нисек тыуыуын йәнле итеп күҙаллатыр картина тыуҙырған.

Ураҡсиндың геройҙары, дөйөм алғанда, интеллектуаллеге менән үҙенсәлекле. Эҙләнеүсәндәр, күптәре фәнгә эйә кешеләр. Телгә алынған повестарының геройҙары һәм “Ҡарат” романындағы В.Даль генә түгел, “Тамғалы таш”, “Һырлы эйәр” хикәйәләре персонаждары ла — ошо әйтелгәнгә тос миҫал.

“Тамғалы таш” хикәйәһендә, уҡытыусы Шәриф ағайҙан күрмәксе, тарихи, археологик ҡомартҡылар йыйырға әүәҫ Муса атлы малай хаҡында бәйән ителә. Ул тапҡан тамғалы тишек таш, Өфөнән килгән археолог әйткәнсә, фән өсөн ҡиммәтле табыш булып сыға.

“Һырлы эйәр” хикәйәһендә иһә ябай ауыл ҡарты Ниғмәт фән хаҡына атаһынан ҡалған иң ҡәҙерле ҡомартҡыны — һырлы эйәрен музейға тапшырырға ризалаша. Йәғни ҙә, тарих уҡытыусыһы, ғалим ғына түгел, уҡыусы бала йә мәғлүмәтһеҙ ҡартмы — дөйөм мәнфәғәт күҙлегенән фәнни фекер йөрөтөр кимәлдәге персонаждар кимәленә күтәрелә.

З.Ураҡсиндың әҫәрҙәре хаҡында, әле яһалған ҡыҫҡа ғына күҙәтеүҙәрҙән сығып, шуны билдәләргә була. Беренсенән, уймаҡ хикәйәләренә генә түгел, уның эпик хикәйәләренә, повесть-романдарына күләм йыйнаҡлығы, фекер тослоғо хас. Был, моғайын да, бая әйтелгәнсә, уның уймаҡ хикәйә жанрында ижад итеүҙә туплаған тәжрибәһенән килә торғандыр. Икенсенән, геройҙары араһында эҙләнеүсән һәм ғилми фекерләүсәндәренең күплеге иһә авторҙың үҙенең дә иң әүәл фән әһеле булыуынан һәм ғилми фекерҙәрен аргумент менән нығыта барырға күнегеүенән килә торғандыр.

Урақсиндың әҫәрҙәрендә фольклор башланғысы ла күҙгә ташлана. Тәүҙә шуны билдәләү кәрәк. Фольклор башланғысын әҙиптәребеҙ төрлө принциптан сығып файҙалана. Әҙәби әҫәрҙәрҙең берәүҙәре фольклор персонажы образына, икенселәре фольклор сюжетына ҡорола. Тотош фольклор әҫәре цитата рәүешендә файҙаланылған осраҡтар ҙа бар. Ундайҙарын фәндә хәҙер интертекст ҡулланыу тип атайҙар. Ә инде мәҡәл, тапҡыр һүҙ (урыҫтың поговорка тигәне) кеүек афористик жанр өлгөләре, халыҡ ижадына хас сағыштырыу, метафора, эпитет һымаҡ троптар хаҡында әйтеп тораһы ла түгел. Улар һәр әҙәби әҫәрҙә лә файҙаланыла. Йыш ҡына бындай алымдар, аҡ тунға һалынған ҡара ямау кеүек, күҙгә бәрелеп тора. Ә бына Урақсиндың әҫәрҙәренә фольклор башланғысы тәбиғи генә килеп инә. Килеп инә лә әҫәргә эске бер аһәң өҫтәй. Уны мәғәнәүи яҡтан байыта, фекер тослоғона булыша. “Әсә ҡулдары” тигән уймак хикәйәһендә, күҙәтеүҙән тыуған ассоциация һөҙөмтәһе рәүешендә генә, бер нәсихәт (притча) килтерелә. Шул ғына ла күләм йәһәтенән бәләкәй генә әҫәргә эпиклыҡ башланғысы өҫтәп, уны мәғәнәүи яҡтан һыйҙырышлы итә. “Күстәнәс” тигәне иһә тотошлай фольклорға, нәсихәт сюжетына ҡоролған.

Танылған ғалимә һәм башҡорт ҡатын-ҡыҙы араһынан тәүге доктор-фольклорсы булараҡ та билдәле Фәнүзә Нәҙершинаның халыҡ йыры менән мауығыуы, үҙенең матур ғына йырлауы күптәргә мәғлүм. Ишеткән бар. Бына шул апай кисәләрҙәме, мәжлестәме һүҙ ала ҡалһа, йолабыҙ буйынса уны мотлаҡ йыр менән ослар булыр. Һәм йыш ҡына, Урақсин барҙа ла, ул юҡта ла: “Мин Зиннур Ғәзизовичтың яратҡан йырын ишеттерәйем әле”, — тиер ҙә:

Айҡай ҙа ғына сайҡай керҙәр йыуа,
Һай кем, керҙәр йыуғанда,
Талмаймы икән уның беләккәйҙәре,
Һай кем, сайҡағанда,
Күрше генә тороп, күрешә йөрөп,
Һай кем, күрешә йөрөгәндә,
Янмай микән уның йөрәккәйҙәре,
Һай кем, кис ятҡанда... —

тип йырлап та ебәрә. Яратҡан йырын Зиннур Урақсин “Йыр артынан барам” тигән эпик хикәйәһендә лә файҙаланған. Әҫәр тотошо менән ошо йырҙың яңы осорҙа тыуған, әммә йөкмәткеһе йәһәтенән уға ауаздаш сәсмә варианты кеүек ҡабул ителә. Унда һүҙ Хисмәт атлы егеттең ошо йырҙы йырлаған ауылдашы Гөлсөм өсөн “йөрәккәйҙәре яныуы”, үкенесле тәүге мөхәббәте хаҡында бара. Йыр иһә шул үкенес тойғоһон көсәйтеүгә, һағыш хисен асыуға булышҡан.

## 4. Фән үренә үрләгәндә

Ҡуңыр йөҙлө студент хаҡында тәүге мәғлүмәттәр биргәнендә, Вафа дуҫым:

— Бик бөтмөр, соҡсонма егет: дәрес бөттөмө — сәғәттәр буйы һүҙ өҫтөндә соҡсона. Ҡумта ҡултыҡлап йөрөгәненә иғтибар иттеңме? — тине.

— Иттем, иттем...

— Итһәң, шул: синонимдар буйынса һүҙлек төҙөргә йөрөй ул.

Минең күҙҙәр шарҙай булды:

— Студент сағында уҡмы?

— Эйе!

Ысынлап та, шул йылды шәриҡтәше Эрнест Ишбирҙин менән бергәләп Зиннур Ураҡсин "Башҡортостан уҡытыусыһы" журналында (1962, №3) "Башҡорт телендә синонимдар" тигән мәҡәлә баҫтырҙы.

Студент сағында уҡ ошо тема буйынса йыя башлаған материалдарын рәткә килтереп, аспирантурала уҡығанында, минең һабаҡташтарым БДУ-ны тамамлаған йылды ун баҫма табаҡ күләмендәге китап итеп сығарҙы (Башҡорт теленең синонимдар һүҙлеге. Өфө, 1966).

Теге саҡта Вафа ауыҙынан ҡуңыр талиптың ғилми китап сығарырға ниәтләнеүен ишетеп, аптырағайным. Баҡтиһәң, аспиранттың китап сығарыуы ла һирәк осрай торған күренеш, имеш. Вафаның Зиннур Ғәзиз улы хаҡында әлеге әйткән баһаһының бер раҫланмышы ине был. Бөгөн иҫән булһа, ни тиер ине икән ул дуҫым? Зиннур Ураҡсин имзаһы менән сыҡҡан ғилми китаптарҙың һаны егермеләп. Уларҙың бер өлөшө ҡәләмдәштәре менән авторҙашлыҡта сығарылыуы ла әлеге баһаның бәҫен төшөрмәй.

Зиннур Ураҡсин, нигеҙҙә, лексикология өлкәһендә эшләне. Белгестәр ҙә, студенттар ҙа, мәктәп уҡытыусылары менән уҡыусылар ҙа ул яҙған "Башҡорт теленең фразеологияһы" (М., Наука, 1975), "Башҡортса-русса фразеологик һүҙлек" (Өфө, 1973) ише китаптары йөҙөндә файҙалы ҡулланма тапты.

Зиннур Ураҡсин етәкселегендә йә туранан-тура уның ҡатнашлығында әҙерләнгән "Ҡыҙыҡлы грамматика" (авторҙаштары: Э.Ишбирҙин, Г.Ҡотлобаева, М.Әхмәтов), "Туған тел серҙәре" (авторҙашы: Э.Ишбирҙин), "Тел күрке" (авторҙашы: Э.Ишбирҙин,) "Русса-башҡортса уҡыу һүҙлеге" (авторҙаштары: Ф.Әсәҙуллина, Л.Сәйәхова), тотош бүлек менән әҙерләнгән ике томлыҡ "Башҡорт теленең аңлатмалы һүҙлеге" хаҡлы рәүештә киң танылыу тапты.

Алтмышы тулыр алдынан икәү-ара әңгәмәләшеп ултырған дәүерҙә Ураҡсиндың эш өҫтәлендә Мәскәүҙә сығасаҡ "Башҡортса-русса һүҙлек"тең оригинал-макеты ята ине. Уны күргәс:

— Быны үҙебеҙҙә генә тиражлап булмаймы? — тип һорауыма директор шулай тип яуап бирҙе:

— Эйе. Фотоформалар әҙерләп, бында ла тиражларға була. Бына шул хаҡта үҙебеҙҙең "Китап" нәшриәте менән һөйләшеү алып барабыҙ.

1990 йылда Әхмәтзәки Вәлиди исемендәге Республика китапханаһы "Башҡортостан ғалимдары" серияһында сығарған "Зиннур Газизович Ураксин: Библиографический указатель" (Төҙөүселәре: З.Г.Уразбаева, Р.Х.Хафизова; мөхәррире Р.Х.Тимерғәлина) тигән брошюрала йәмғеһе 292 хеҙмәт күрһәтелгән. Унда төрлө йыйынтыҡтарҙа, журналдарҙа, гәзиттәрҙә баҫылғандары менән бер рәттән, ул оппонентлыҡ, мөхәррирлек иткән хеҙмәттәр, уның етәкселегендә яҙылған диссертациялар теркәлгән.

Иҫәпкә инмәгән, һуңғы йылдарҙа донъя күргән хеҙмәттәрен ҡушһаң, был һан өс йөҙҙөң аръяғына сығып китә. Шул исемлекте күҙҙән кисереү ҙә З.Ғ.Ураҡсиндың башҡорт филологияһын, төрки тел ғилемен үҫтереүгә ҙур өлөш индереүе, уның төрлө йүнәлештә емешле эшләүе хаҡында бай мәғлүмәт бирә, егәрлелегенә һоҡланырға форсат бирә.

## 5. Аҡбейектең әйҙәгәне

Зиннур Ураҡсиндың фән өлкәһендә яуланған үрҙәре хаҡында һоҡланып уйландым да уға традицион һәм күптән ҡалыпҡа әйләнгән һорауҙы бирмәй булдыра алманым теге мәлдә:

— Фәнгә килеү теләге ҡасан тыуҙы? Бала саҡта уҡмы?

Зиннур Ғәзиз улы йылмая биреп ҡуйҙы ла:

— Дөрөҫөн әйткәндә, төпкөл ауылда йәшәгән баланың башына фән докторы, профессор булырмын тигән уй килеү ҡайҙа инде ул?! Ете йыллыҡ мәктәпте тамамлағас, атай менән әсәй уйға ҡалды: "Ҡайҙа ебәрәйек икән был баланы? Артабан уҡып, кеше булһын, тиһәң, урыҫ мәктәбенә бирергә кәрәк. Унда тағы булмай: урыҫ малайҙары уҫал, туҡмап китерҙәр. Ятағы ла юҡ".

Беҙгә иң яҡын башҡорт мәктәбе Морапталда ине. 15 саҡрым. Аҙна һайын ҡайтып йөрөргә кәрәк. Тағы булмай — апайым Дүшәнбелә ине.

Тиҙҙән апайым ҡайтып, мәсьәләне хәл итте. Ауылдан бер ағай Мораҡ педучилищеһында уҡый ине. Теге ағай, хәҙер барһағыҙ, имтихан мәле, тип, нисек барырға, нимә эшләргә икәнен өйрәтте. Апайым: "Зиннур мотлаҡ шунда барһын", — тине. Атай: "Ярай, улай булғас", — тип, эште ҡыҫҡа тотто. Ат табып, апайым менән икәүләшеп Мораҡҡа алып барып, имтихан бирҙертеп, уҡыуға индереп, тынысланып ҡайтып киттеләр.

— Шунан...

— Шунан инде дүрт йыл Мораҡ педагогия училищеһында уҡыным. Артабан уҡыу башҡа ла кермәне. "Диплом бар. Уҡытам", — тип уйланылды. Шул арала әрмегә алдылар. Ике йыл "айт-два". Ҡотмағандә, Н.С.Хрущев Ҡораллы көстәребеҙҙе ҡыҫҡартты, йәнәһе, яңы һуғыш көҫәүсе империалистарға үрнәк күрһәтә. Шул реформаға эләгеп, ҡайтып төштөм. Тәүҙә Башҡортостандың Федоровка районындағы Һәйет ауылында, шунан үҙебеҙҙең ауылда, Аллабирҙелә, уҡыттым, — тип һөйләп алып китте, үҙе үткән юлды яңынан барлағандай итеп.

Ауылда уҡытҡан ваҡытта шиғырҙар, мәҡәләләр яҙа. Район гәзите уларҙы баҫтыра тора. Мөхәррирҙән, фәлән темаға яҙ, быныһына яҙ, тип кәңәштәр менән тултырылған хаттар килә башлай.

Бер мәлде Ураҡсиндарҙың йорто эргәһенә еңел машина килеп туҡтай. Аптырашып ҡала былар. Өйөң янына туҡтау түгел, ауылыңа һирәк инә торған машина булһын да, аптырамаҫ ерҙән аптырарһың! Машина эсенән сыҡҡан ир:

— Һинме Зиннур Ураҡсин? — тигәс, егет ҡаушап ҡала.

— Мин...

— Мин — район гәзите мөхәррире. Һине эшкә алырға килдем. Ҡәләмең бар. Мәктәптәгегә ҡарағанда, беҙҙә эш хаҡы ла ҙурыраҡ. Әле өйләнмәгәнһең. Бәлки, артабан уҡытып та алырбыҙ, — тигән була.

Быны шулай ылыҡтырғыс итеп ҡыҙыҡтыра йәш ауыл хәбәрсеһен мөхәррир иптәш. Был һөйләшеү 1958 йылда була. Ошо уҡ йылда Зиннур Ураҡсин журналист һөнәрен үҙләштерергә тотона.

Район гәзитендә эшләгәндә, яҙырға ҡул ҡысытып ҡына тороу етмәүенә, белемде тәрәнәйтеү кәрәк икәненә төшөнә егет. Ҡайҙа барырға? Ырымбур яҡын. Йөҙ генә саҡрым. Ләкин артҡа түгел, алға ҡарай егет. Өфөгә, тик Өфөгә! Шулай ҡарар итә. Бәлки, былдай етди ҡарарға килеүенә Аҡбейек тауы ла сәбәп булғандыр. "Нимә? Нимә? Тау тиһеңме?" — тип ғәжәп итә күрмәгеҙ, тыуған ауылының халҡы һыулаған Юшатыр буйынан, эргәләге Мөлкәмән тауынан ҡараһаң, ул тау әллә ҡайҙан Башҡортостан яғында күренеп ята. Берсә ағарып, берсә монарланып, күңеленде ылыҡтырып, ҡыҙыҡтырып ята ул. Ә уның аръяғында әллә ниндәй сихри донъя барҙыр кеүек тойола кескәй сағында Зиннурға. Шуға ла Аҡбейек һәр саҡ үҙенә әйҙәп торғандай була уны. Әле иһә, күптән инде ул тауҙың аръяғына сығып, Мораҡта уҡып, сихри донъя юҡлығына төшөнһә лә, Аҡбейек әйҙәү ҡөҙрәтен юғалтмаған уның өсөн. Шулай булмай һуң! Уның аръяғының аръяғы бар ҙа баһа! Ә уның аръяғында — Башҡортостандың баш ҡалаһы Өфө.

Ауыл хәбәрсеһенән район гәзитенең әҙәби хеҙмәткәре кимәленә күтәрелеүенә ҡарамаҫтан, шул йылды уҡ әле генә асылған Башҡорт дәүләт университетының тарих-филология факультетының ситтән тороп уҡыу бүлеге студенты булып китә Зиннур Ураҡсин.

Сессияға килгән һайын, көндөҙгө бүлектә уҡыған иптәштәренең осраған береһе:

— Нишләп улай заочник булып йөрөйһөң йәп-йәш көйө? Өйләнмәгәнһең-нитмәгәнһең, күс очныйға! — тиҙәр.

Димсе диңгеҙ кисә, тигән һымаҡ, шуларҙың ҡотҡоһона бирелеп, деканға керә Ураҡсин. Бәхеткә күрә, урыҫ бүлегендә урын булып сыға. Декан Ҡисельгоф менән урынбаҫары Ғәли Сәйетбатталов егеттең зачеткаһын ҡарайҙар ҙа:

— Очныйға күсһәң, бер йылыңды юғалтаһың инде. Шуға ризаһыңмы һуң? — тиҙәр.

— Риза, — ти егет. Өнһөҙ генә әйҙүкләп, ҡеүәтләп торғандай тойолоуы менән Аҡбейек бына нимәгә сәбәпсе була.

## 6. Остаздар фатихаһы

Урыҫ бүлеге булһа ла, Зиннур бараһы төркөм башҡорт, татар мәктәптәре өсөн уҡытыусылар әҙерләй. Тел ғилеме өлкәһендә тәүге академик буласаҡ шәкерте менән факультеттың филология бүлегенең берҙән-бер профессоры, университеттың беренсе проректоры, мәшһүр төркиәтсе Жәлил Ғиниәт улы Ҡейекбаев ("Мәрмәр баҫҡыстар" повесындағы профессор Ғиниәтов йөҙөндә уны танырға була. — ***Ә.С.***) менән осрашырға, унан һабаҡ алырға шунда насип була.

Зачетты кем генә бирмәй. Быйыл өсөн программала күрһәтелгән әҙәбиәтте, лекция ваҡытында яҙғаныңды уҡыштырып, ғәмәли дәрестәрҙә әүҙем ҡатнашыуың ғына бурыс. Әммә, уҡып-уҡып та телгә һиҙгер булмаһаң, бөттө баш, ҡалды муйын һерәйеп! Шуны иҫтә тотоптор инде, Жәлил Ҡейекбаев буласаҡ шәкертенән бер мәлде билдәлелек һәм билдәһеҙлек категорияһы хаҡында һорай. Зиннур ҡаушап ҡала. Быны күреп:

— Немец телен беләһеңме һуң? — тип һорай профессор.

— Юҡ. Мәктәптә бер-ике класта булғайны, педучилищела бөтөнләй уҡытманылар...

Ошондай яуап ишеткәс, заманында үҙе Мәскәүҙә Морис Торез исемендәге сит телдәр институтында уҡып, немец теле белгесе булып сыҡҡан, шунда уҡ урыҫ телен ныҡлап үҙләштергән, төрки, фин-уғыр тел төркөмдәре вәкилдәре менән һин дә мин аңлаша алған Жәлил Ғиниәт улы (студент сағымда үҙем шаһит булған ваҡиға. 1963 йылдың яҙында Венгриянан бер фольклорсы килгәйне. СССР Фәндәр академияһының Башҡортостан филиалы президиумында уҙғарылған осрашыу ваҡытында, тәржемәсенең еткерә тәржемә итмәүенә ризаһыҙлыҡ белдереп, ҡунаҡ менән уның телендә һөйләшкәйне) немец, урыҫ һәм башҡа телдәрҙә теге категориялар нисек булыуын аңлата. Егеттең күҙе асылып киткәндәй итә. Артабан башҡорт теленән миҫалды үҙе табып, шартлатып аңлата ла бирә. Студентының отҡорлоғон хуплап:

— Үәт нисек була ул! Зиһенең камил, мырҙам! — ти профессор ғәҙәтенсә һәм “зачтено”ны ҡуйып та бирә.

Атаҡлы остазы менән бына шулай таныша буласаҡ академик. Урыҫ бүлегендә уҡыһа ла, программанан тыш башҡорт теле буйынса уның лекцияларына йөрөй башлауына ошо осрашыу сәбәпсе булғандыр, моғайын. Туған тел серҙәренә тәрәнерәк төшөнөү теләге уны шул арҙаҡлы ғалим үҙе етәкләгән тел түңәрәгенә лә алып килә. Өсөнсө курста уҡыған сағында, талиптарҙың ғилми конференцияһында “Башҡорт телендә синонимдар” тигән темаға доклад һөйләй. Ураҡсиндың был сығышын Жәлил Ғиниәт улы бик юғары баһалай һәм:

— Был тема — башҡорт тел ғилеменең сиҙәме. Әйҙә, ошоноң буйынса диплом эше яҙ. Шуны уҡ диссертация итеп үҫтерергә лә булыр, — тип, килер көндәрендә, ғилем юлында уңыштар теләп, фатихаһын бирә.

— Ошо доклад, фатиха минең яҙмышымды хәл итте, фән өлкәһендәге юлымды билдәләне: мин лексикология өлкәһенә шулай килеп юлыҡтым. Беҙ уҡығанда факультетта фәнгә, ғөмүмән, иғтибар ҙур ине. Көслө уҡытыусылар уҡытты. Урыҫ теленән Игорь Павлович Распопов, Нина Дмитриевна Ғарипова (“Мәрмәр баҫҡыстар”ҙағы Нина Васильевнаны беҙҙең заман талиптары мотлаҡ бик тә баҫалҡы һәм иғтибарлы апай тип танырына шигем юҡ. — ***Ә.С.***), Леонид Михайлович Васильев... Н.Д.Ғарипова беҙҙең кураторыбыҙ ҙа ине. Дәрестәрен ул бер яҡлы ғына ҡормай торғайны. Бәхәстәр тыуҙыра белде Нина Дмитриевна. Әйтәйек, берәй проблеманы ала ла, бының тураһында төрлө фекер бар: берәүҙәр былай ҡарай, икенселәр — тегеләй, өсөнсөләр... Шуларҙың хеҙмәттәре менән танышып, үҙегеҙ уйлап ҡарағыҙ әле: кемдеке хаҡ икән? Бына шулай итеп, фәндә фекер монополияһы булмай ул, тигәнде төшөндөрә торғайны. Уның арҡаһында тағы бер яҡшы остазымды таптым. Ул беҙҙең кураторыбыҙҙың ире Талмас Мәғәсүм улы Ғарипов ине (әлеге повеста ул Тәлғәт Мөҡсим улы Зарипов тип алынған. — ***Ә.С.***). Беҙ студент саҡта ул Мәжит Ғафури исемендәге Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтында эшләй ине. Талмас Мәғәсүм улы беҙҙең менән осрашыуға килеп, Венгрияға барыуы, мадьяр-башҡорт бәйләнештәре хаҡында һөйләне. Осрашыу аҙағында фәнгә килергә саҡырҙы. Теләктәре булғандарҙы яҙып та алды. Эрнест Фәйзрахман улы (повестағы Эдуард Ишкининдың прототибы. — ***Ә.С.***) менән икәү яҙылдыҡ, — тигәйне Зиннур Ғәзиз улы, университет йылдарын хәтерләп.

XX быуаттың 70—80-се йылдарында БДУ-ла уҡытҡан сағымдағы күҙәтеүҙәремдән сығып, шуны геүаһлай алам. Инде танылған телсе ғалим, лексикограф, яҙыусы булып киткәс тә, Зиннур Ғәзиз улы, остазы Талмас Мәғәсүм

улы һымаҡ, үҙе лә студенттар менән ихлас осрашыр ине. Шунда хәтирәләре, сит илдәргә сәйәхәттәре, Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтының эшмәкәрлеге хаҡында һөйләр ҙә:

— Кем киләсәктә үҙен фән кешеһе итеп күҙ алдына килтерә, һеҙгә шундай кәңәшем. Бишенсе курста дипломға тиклем курс эштәре яҙаһығыҙ бит. Ғилми етәкселәрегеҙ менән һөйләшеп, перспективалы тема алырға тырышығыҙ. Артабан диплом эше, фән кандидатлығына диссертация кимәленә тиклем үҫтерегеҙ. Юғары белем тураһындағы дипломды кеҫәгә һалғас, туҡтап ҡалмағыҙ: тура беҙгә аспирантураға килегеҙ! — тип яусылар ине. Студент халҡына шул етә ҡала, һорау өҫтөнә һорау яуҙыра башларҙар ине:

— Һеҙҙә ниндәй һөнәрҙәр буйынса аспирантуралар бар?

— Тел ғилеме йә методика, фольклор буйынса диплом эше яҙған кеше әҙәбиәт буйынса аспирантураға инә аламы?

— Йәки киреһенсә?

— Аспиранттың стипендияһына йәшәргә буламы?

Зиннур Ғәзиз улы һәр һорауға төплө яуап бирә. Студенттар ҡәнәғәт ҡала. Ә инде бирелгән һорауҙарҙан тыш мәғлүмәт ишетеүҙәре уларҙа айырыуса кинәнес уята торғайны. Бер осрашҡанда:

— Беҙҙең Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтында математика факультетын, рус бүлеген тамамлаған кешеләр — башҡорт теле буйынса, архитектор, бейеүсе, врач — тарих буйынса, тарихсы — фольклор буйынса диссертация яҡлаған осраҡтар ҙа бар, — тип әйтеүе улар өсөн бөтөнләй көтөлмәгән мәғлүмәт булды.

Юғары уҡыу йорттары талиптары менән ошондай осрашыуҙар үткәреү, шундай саҡта йәштәрҙең ҡайһы берәүҙәренең күңелен аулау һәм киләсәктә уларҙа аспирантураға урын дәғүә итеү теләге уятыу традицияһы, үкенескә ҡаршы, хәҙер онотола башланы. Хәйер, ул традицияның әһәмиәтен аңлау һәләте — күңел киңлегенә эйә булып, фәндең, мәҙәниәттең киләсәге хаҡында ҡайғыртa белеүселәрҙең генә өлөшө. Бының тап шулай булыуына З.Ғ.Ураҡсиндың үҙенең фәнгә килеүе — үҙе үк дәлил. Теге саҡта Жәлил Кейекбаевтың фатихаһы, Талмас Мәғәсүм улының саҡырыуы үҙенекен итә. Тел серҙәренә ныҕыраҡ төшөнөргә тырышып, һабаҡташы Эрнест менән оҙаҡ-оҙаҡ китапханаларҙа юғалып тора башлайҙар. Нимә уҡыһа ла, егет синонимдар буйынса материал тупларға, теоретик әҙәбиәтте ныҕыраҡ өйрәнергә тырыша. Һабаҡташы Эрнест менән яҙылған әлеге мәҡәлә “Башҡортостан уҡытыусыһы” журналында ана шул эҙләнеүҙәрҙең тәүге һөҙөмтәһе булараҡ донъя күрә.

Берәм-берәм тултырылған карточкалар әллә нисә ҡумта булып китә. Егет уларҙы иң ҡиммәтле байлығылай күрә. Бөртөкләп йыйылған алтын, тиерһең: каникулға ҡайтҡанда ла материалдарын үҙе менән алыр була. Шулар диплом эше яҙырға ла, фән кандидатлығына диссертация әҙерләргә лә етә, тәүге ғилми китабына ла нигеҙ була.

Талмас Ғариповтың әйҙәләүе арҡаһында кисәге студенттың яҙмышы ғүмерлеккә Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты менән бәйләнә. Тәүҙә лаборант, унан — аспирант, кесе ғилми хеҙмәткәр, өлкән ғилми хеҙмәткәр, 1969 йылдан тел бүлеге мөдире, ТТӘИ директоры, Башҡортостан фәндәр академияһы президиумы рәйесе урынбаҫары, йәғни вице-премьер... Бына шулай вазифа артынан вазифаны сиратлаштырып, үрләй бара Ураҡсин. Филология фәндәре кандидаты, филология фәндәре докторы, профессор, Башҡортостан Фәндәр академияһы

академигы тигән ғилми дәрәжәләре иһә вазифалар баҫҡысынан күтәрелеүенә терәк тә, этәргес тә була. Институт директоры посына үрләтелгәс тә шул бүлеккә етәкселек итә һәм уны ғүмеренең ахырынаса ташламай. Ошо бүлектә эшләгән дәүере хаҡында һүҙ сыҡһа, Зиннур Ғәзиз улы тағы бер остазын хөрмәт менән иҫкә алыр ине. Ул — Ҡасим Әхмәров.

— Ғилми етәксем Ҡасим ағай бүлек мөдире ине. Мине үҙенә штаттан тыш ярҙамсы итеп тәғәйенләне. Протокол да алып барам, план да төҙөшәм... Бөтәһенә лә үҙе өйрәтте. Үҙенең һаулығын самалап, урынына мине әҙерләй тороуы шул булғандыр инде... 68 йәштә генә вафат булды... Ҡасим ағай урынына мине бүлек мөдире итеп һайланылар.

Артабан да Зиннур Ғәзиз улы БДУ-ла тапҡан тәүге остазы — Жәлил Кейекбаев менән бәйләнешен юғалтмай. Ә униһы, күргән һайын:

— Кеше профессор янындараҡ булырға тырышыр ине, — тип, уны университетка күсергә димләй. — Һин — урыҫ бүлеген бөткән башҡорт теле белгесе. Әйҙә, мырҙам, сағыштырма грамматика буйынса дәрес бирә тор, — ти. Ә Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтына ерегеп өлгөргән шәкерте:

— Рәхмәт, Жәлил Ғиниәт улы! Уйлармын, — тип яуаплау менән сикләнә тора.

Әлбиттә, уҡытыу кабинетта ғына ултырып эшләүҙән нык айырыла. Һин һәр саҡ ҡыҙыҡһыныусан, эҙләнеүсән йәштәр менән аралашаһың, иғтибар үҙәгендә булаһың. Уҡытыу — белгәнеңде башҡалар менән уртаҡлашыу. Ул һиңә төбәлгән һынаулы ҡараштар аҫтында аяҡ өҫтө тауышланып уйланыуҙы ла, импровизациялауҙы ла үҙ эсенә ала, тимәк, фекерләү һәләтеңде үҫтерә, әйтер һүҙеңде тыңлаусыларыңа логик эҙмә-эҙлелектә еткерергә өйрәтә, ғилми хеҙмәтеңде ғәмәлдә һынап ҡарау, урыҫсалап әйткәндә, уға опробация үткәреү ҙә. Ара-тирә студенттарға дәрес биргәнендә, Ураҡсин вуз уҡытыусыһы һөнәренең шул яҡтарына яҡшы төшөнә.

Бөтәһен дә күрә йөрөгән Жәлил Ғиниәт улы йәнә бер осрашҡанында:

— 1966 йылда кандидатлыҡ яҡланың. Шуның менән сикләнмә. Хәҙер үк докторлыҡ диссертацияңа тотон. Эште һуҙма, — ти. Фатихаға тиң был изге теләк васыят булыр тип бирәү ҙә уйламағандыр. Үкенескә ҡаршы, Жәлил Ғиниәт улы, барлыҡ шәкерттәрен, башҡорт тел ғилемен етем ҡалдырып, 1968 йылдың мартында баҡый донъяға күсте...

Остазының: “Фразеология буйынса эшлә”, — тигәнен иҫтә тотоп, Ураҡсин ошо өлкәлә эҙләнә башлай. 1975 йылда Мәскәүҙә “Наука” нәшриәтендә төркиәттең танылған ғалимы Э.Р.Тенишев мөхәррирлегендә донъя күргән “Башҡорт теленең фразеологияһы” тигән китабы шул эҙләнеүҙең бер һөҙөмтәһе була. Икенсеһе иһә шул: монография авторы үҙенең ҡырҡ йәшен фән докторы сифатында ҡаршылай. Башҡорт филологияһы өсөн ул йыл бик тә иҫтәлекле булды: бер төптән ике доктор үҫеп сыҡты. Ураҡсиндан тыш, диссертация яҡлау буйынса БДУ-ла яңы асылған йыйылма ғилми советта ошо уҡыу йортондағы башҡорт тел ғилеме кафедраһы мөдире Нәғим Ишбулатов та докторлыҡ дәрәжәһенә өлгәште.

## 7. Уйҙары яҡшы, хыялдары яҡты ине

Был яҙмаларҙың башында әйтелгәндәрҙән аңлашылыуынса, З.Ғ.Ураҡсин менән мин студент саҡтан уҡ таныш инем. Был урында мин 1961 йылдың көҙөн, йәғни беҙ беренсе курста уҡый башлағандан уҡ үҙебеҙҙең уҡыу төркөмөнә уның

еҙнә булырға йөрөгән сағын күҙ уңында тотам. Әммә, мәжлестәрҙә ултырҙаш булғылағаныбыҙҙы иҫәпкә алмағанда, төркөмөбөҙ еҙнәйе менән йәйелеп китеп һөйләшеп ултырырға насип булғаны юҡ ине. Быңдай форсат уға алтмыш тулғанда ғына тейҙе. Хәйер, был осраҡта ла “йәйелеп ултырып” тип әйтеүем шартлы булып сыҡты. Ни өсөн тигәндә, эш бүлмәһендәге ике телефон да алмаштилмәш шылтырай ҙа шылтырай: илдең теге осонан да, бирге башынан да уны юбилейы менән ҡотлайҙар. Хәйер, башланған һүҙебеҙҙе өҙгөләһә лә, ҡаптары ҡыҙа яҙғансы телефондарҙың шылтырҙығы сығыуы ҡамасау тойолманы ул саҡта. Шулай булмай һуң, юбилярға мин бирәһе ҡайһы бер һорауҙарға көнәлгәре әйтелгән яуап ине бит улар. Эш ваҡыты үтеп барғанда ла телефондары алһыҙялһыҙ шылтырҙығы сыға икән, тимәк, уны ил буйынса белеүселәр күп, тимәк, уны онотмайҙар һәм хөрмәт итәләр.

Ара-тирә директор үҙе лә, сығып, юғалғылап тора. Шуның өҫтөнә, ағымдағы эштәр буйынса ла, ҡотларға килеп, уның янына инеп сығыусыларҙың да иҫәбенһанын алырлыҡ түгел. Директорлыҡтан тыш, етәкләгән аспиранттар, бүлек, Рәсәй Фәндәр академияһының Өфө ғилми үҙәге президиумы (ул унда рәйес урынбаҫары ине), Башҡортостан Фәндәр академияһы (унда вице-президент, гуманитар фәндәр бүлеге етәксеһе булды) менән бәйле мәшәҡәттәре етерлек. Бынан тыш, “Башҡортостан энциклопедияһы”на ла ваҡыт бүләһе бар. Президент Советына ла... Бөтәһенә лә өлгөрөргә, бөтәһен дә иңләргә тырыша Ураҡсин һәм шуға ирешә лә. Ана, инә килеп, секретары ниҙер әйтеүгә — йүгерә-атлап йәнә сыға һалып китте. Шулай тилбер булыуы, шуның өҫтөнә, үҙенә ниндәй ҡыйын саҡта ла башҡаларға шуның көсөн төшөрөүҙе белмәүе, сырайының баҙыҡлығы бихисап мәшәҡәттәрҙе еңергә лә, ғилми эш менән әүҙем шөғөлләнергә лә, әҙәби әҫәрҙәр ижад итеүгә лә бермә-бер булышалыр, тим. Ә инде уның ихлас итеп, сытырлата көлөп ебәреүҙәрен ни тиһең! Оптимизмдың классик өлгөһө тимәгәндә лә, шуға яҡын баһа менән генә нарыҡларға булалыр ул быны. Әгәр инде кисәләрҙә, мәжлестәрҙә уның ҡолас ташлап “Байыҡ” йә “Перовский”ға бейеп китеүен күрһәгеҙ! Үндай саҡта бөтөнләй икенсегә әүерелә ине ул. Улай-былай егеттәрең ары торһон! Күкрәк кирелгән, һын тартылған, ә йөҙө! Йөҙө ҡояштай балҡый. Аяҡтары иһә, көй ҡайҙа — мин шунда, тип өҙә баҫа. Ситтән килгәндәрҙең: “Академик түгел, артистыр был!” — тигәнен ишеткән бар. Ана шулай бар фиғеле, йөрөш-торошо алтмышына артылғанында ла, етмешенә еткәндә лә йәштәрсә ине уның. Шуға ла алтмыш бише тулғанда кемдеңдер: “Хөрмәтле Зиннур Ғәзиз улы! Һеҙҙе данлы 50-геҙ менән ҡотлайым!” — тип телеграмма һуғыуына һис тә аптырайһы түгел.

Юбилейҙар килә лә китә. Ә мәшәҡәттәр ҡала. Әммә үҙенең шәхси байрамы мәлендә лә Зиннур Ғәзиз улы уларҙы онотмай. Горбачевтың “перестройка”һы, Гайдар, Чубайстар кампанияһының “реформа”һы дәүерендә илдәге ғилмитикшеренеү институттарының байтағы тарҡалды. Сәбәбе — эш хаҡын ваҡытында ала алмау. Рәсәй Фәндәр академияһы аҡсаны яртылаш ҡына бүлә башланы. Шулай итмәй, ҡалай итһен. Уның бюджетын да киҫтеләр бит. Ҡиҫмәҫтәр ине, Гайдар, Чубайстар компанияһы өсөн Гарвард проектына ярашлы (АҠШ) яманатлы “реформаны” беҙҙең илдә тиҙерәк бойомға ашырып, фольклор телендә әйткәндә, тиҙ арала “прихватизация” тип аталған приватизация үткәреп, олигархтарҙы үрсетеү мөһимерәк ине. Сүп өҫтөнә — сүмәлә, тигәндәй, Борис Ельциндың: “Культура подождёт!” — тигәне лә туранан-тура фән яҙмышына

ҡағылды. Ошондай шарттарҙа ТТӘИ ике аяғында ла ныҡ баҫып тороп ҡала алды. Бында хатта яңы бүлектәр ойошторолдо. Энциклопедия һәм этнография музейы “башҡа сығарылды”. Ғилми тикшеренеү институттарының бүтәндәрендә аспирантура үҫешә алмай интегә башлаған бер мәлдә Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтында иһә (Аллаға шөкөр!) Мәскәү ҡуптарған ваҡиғалар дәүерендә ике кеше фән докторы тигән юғары ғилми дәрәжә алды, байтағы фән кандидаты булыуға иреште.

— Институтты Башҡортостан Фәндәр академияһын ойоштороу ҡотҡарҙы. Бының өсөн республикабыҙ етәкселегенә рәхмәт, — ти торғайны Зиннур Ғәзиз улы. Ә хеҙмәттәштәренең: “Директорыбыҙҙың шәхси инициативалылығы, ойоштороу һәләте ҡотҡарҙы беҙҙе!” — тигәнен ишеткән бар. Үҙ сиратымда мин иһә был һүҙҙәргә: “Алдан күрә һәм коллегиаль эш итә белеүсәнлеге лә”, — тип өҫтәр инем.

Алдан күрә белеүсәнлек тигәндәй, Зиннур Ғәзиз улы бөгөн өлгәшелгән менән генә хушһынып ҡалыусыларҙан түгел һәм киләсәкте күҙаллап эшләргә тырыша ине. Үҙе етәкләгән ТТӘИ-нең тулыһынса Башҡортостан Фәндәр академияһына инеренә, ә республика Фәндәр академияһының элекке союздаш республикаларҙағы фәндәр академиялары йә СССР Фәндәр академияһының Башҡортостан филиалы хоҡуҡтары менән Рәсәй Фәндәр академияһы составына инеренә ышана ине. Ул саҡта Өфө фәнни үҙәгенең хәжәте лә ҡалмаҫ ине. Ошо хаҡта һүҙ сыҡҡас: “Мәскәүҙә был мәсьәләне әлегә аңлап бөтмәйҙәр. Шулай ҙа академия системаһын яңыртыу идеяһын яҡлаусылар бар. Шуларҙың береһе — Өфө ғилми үҙәгенең рәйесе, Башҡортостан Фәндәр академияһы Президенты вазифаһын атҡарыусы академик Р.И.Ниғмәтуллин”, — тигәне хәтерҙә.

Беҙҙең Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты донъяла берәү генә. Ул туранан-тура республикабыҙ мәнфәғәтенә хеҙмәт итә. Әммә үҙебеҙҙә төҙөлгән академияла уға урын юҡ. Әлеге көндә ошо академияға йә Өфө фәнни үҙәгенә ингән башҡа тармаҡ институттарын йә берекмәләрҙә, йә предприятиеларҙа, йә киң илебеҙҙең теләгән бер мөйөшөндә асырға мөмкин. Академик Зиннур Ураҡсин фәнде ойоштороу тәңгәлендәге был проблемаларҙы Мәскәүҙә лә, үҙебеҙҙә лә төптән аңлаусылар власть тотоп тороусылар араһында табылыр көндәр тыуырына ла өмөт итә ине. Иншалла, күмәкләгән яу ҡайтарған, ти. Берҙәмлек булһа, бөгөн булмаһа, иртәгә ул берәгәй һөҙөмтәгә ирешелер.

Киләсәк хаҡында һүҙ сыҡҡанда, Зиннур Ғәзиз улы бүтән пландары барлығын да әйткәйне. Фольклор һәм сәнғәт бүлеген үҙаллы ике бүлек итеп ойоштороу, диалектология бүлеген тергеҙеү, филология һәм сәнғәтте — үҙаллы бер институт, тарих, археология, этнография, этнология һәм антропология өлкәһендә эшләүсе бүлектәрҙән өр-яңы тағы бер институт ойоштороу, ТТӘИ-лә нәшриәт эшен юлға һалыу хаҡында ла хыяллана ине. Тағы әллә күпме хыял һәм ниәттәре бар ине уның.

Бер көләмәс бар. Йәнәһе лә, БАССР-ҙың һәм РСФСР-ҙың халыҡ артисы Ғималетдин Минһажев тыуған ауылына, йәғни Ҡыйғы районындағы Иҙрискә ҡайтып төшкәс, ауыл ҡарттары:

— Ғималетдин, һин хәҙер ҡайҙа эшләйһең? — тип һораған, ти.

Мәшһүр артист:

— Театрҙа, әртис булып, — тигәс, тегеләр:

— Байғош! Һаман эшкә урынлаша алмаған икән, — тиешкәндәр, ти, үҙ-ара.

Шул Иҙрис ауылы ҡарттары һымаҡ, беҙҙә ижад эшен һаман да эш тип һанамаусылар йә уны шәхси ғәмәл тип кенә белеүселәр бар. Уны милли мәҙәниәт күренеше, ә милли мәҙәниәт милләттең күрке икәнен танымауҙан килә был. Зиннур Ураҡсиндың яҙыусылыҡ эшмәкәрлеге лә тейешле баһа алманы. “Тағы әллә күпме хыял, ниәттәре бар ине”, — тигәндә, мин уның күләмлерәк әҫәрҙәр өҫтөндә эшләй башлауын күҙ уңында тотҡайным. Был яҙмаларҙа, уймаҡ хикәйәләренән тыш, телгә алынған повестары һәм романдары әлеге хыял һәм ниәттәренең кескәй, ләкин тос өлөшө генә булып, әле яҙылаһы әллә күпме әҫәрҙәре хаҡындағы хыялдарын үҙе менән алып киткәндер кеүек тойола миңә. Бәлки, улар ҙа ғәмәлгә ашыр ине, әммә... Ана шул “әммә” йыш ҡына эште боҙа ла ҡуя шул. Бына бер миҫал. 2002 йылдың майы ине. Тәрән йоҡолағы һалдат халҡын тревога менән аяҡҡа баҫтырған һымаҡ, бер мәлде ашығыс рәүештә ТТӘИ-ның ғилми советын йыйҙылар. Академик Роберт Ниғмәтуллинды күргәс, уның менән ораашыу-фәлән булалыр, ахырыһы, тип уйланыҡ. Баҡтиһәң, директорҙы алмаштырырға килгән икән. Һүҙҙе оҙаҡҡа һуҙып торманы академигыбыҙ, элек фәнни үҙәк янындағы сит телдәр кафедраһында, унан Башҡортостан Президенты аппаратында эшләй биреп, АҠШ-та стажировка үтеп ҡайтып, сәйәсәт фәндәре докторы булыуға өлгәшкәндән һуң, һөнәренә ярашлы бүлек булмауына ҡарамаҫтан, күптән түгел генә беҙҙең институтта өлкән ғилми хеҙмәткәр иҫәпләнә башлаған И.F.Илешевты директор вазифаһына тәҡдим итеүен әйтте. Көтөлмәгән хәбәрҙе ишеткәс, мин тирә-яғыма күҙ һалдым: элек-электән ошонда эшләп, ғәмәлдәге директорыбыҙҙы лаборант сағынан уҡ яҡшы белгән, бөгөн пенсия йәшен үтеп киткән абруйлы ағайҙар, апайҙар, уларға етә килгән ғилми хеҙмәткәрҙәребеҙ ни әйтер, йәнәһе. Берәү ҙә ҡымшанмай. Әллә бөтәһе лә албырғап ҡалдымы, әллә, берәй һүҙ әйтһәм, яңы директор яңылыш аңлап ҡуйыр, тип уйланылармы? Ләм-мим. Ахырҙа мин тор ҙа һорау бир:

— Роберт Искандерович, мы, конечно, Илишева хорошо знаем (Ант иткәндәй әйтәм: мин был һүҙҙәрҙе, рустар әйтмешләй, “без задних мыслей” ысҡындырғайным. Әммә уны насар яҡтан аңлаусылар булған икән. Һәр хәлдә, бөгөнгө көнгә тиклем шул һүҙемдең “мул емешен” тирәм). Но, как говорят англичане, коней на переправе не меняют. На носу юбилей института. Почему такая спешка?

— Зиннур Газизович сам подал заявление, — тине Ниғмәтуллин.

— Ну и что! — тип ебәргән булдым. — Можно ведь подождать...

— ?

Ниндәй һүҙгә яуап юғын белә торғанһығыҙҙыр. Мин йәнә тирә-яғыма күҙ һалдым: бер кем дә ҡымшанманы, әйтерһең, Зиннур Ураҡсин бөтә аңлы ғүмерен был фән учреждениеһында ҡырын эш ҡылыуға ғына сарыф иткән. Уның эшенә баһа биреүсе лә юҡ, рәхмәт һүҙе хаҡында әйтеп тораһы ла түгел. Мин иһә Рәсәй Фәндәр академияһының Өфө фәнни үҙәге президиумы рәйесе менән тулҡынланып диалогҡа инеүем арҡаһында, был хаҡта, ғөмүмән, онотҡанмын. Ә һуң аҡһаҡалдар ни уйлап ултырҙы икән? Ошо тынлыҡта Ниғмәтуллиндың тәҡдиме бер тауыштан үтте, әлбиттә. Эштән бушатыуҙы һорап, ғариза яҙған сүрәттә лә, кисәге директорға коллегаларынан да, бер-ике ауыҙ булһа ла, йылы һүҙ, етәкселектән дә ниҙер кәрәк ине. Шуға күрә лә Ураҡсиндың бер аҙ депрессияға бирелеп алыуында ла, миҙгел ауырыуҙарын иҫәпкә алмағанда, быға тиклем ятып ауырыуҙың ни икәнен белмәгән көйөнсә, тиҙҙән инсульт алыуында ла, шуларҙың артабанғы

күңелһеҙ һөҙөмтәһен иҫкә алмаған сүрәттә лә, бөтәбеҙҙең дә ғәйебе бар һымаҡ тойола бөгөн миңә (бөтәбеҙ ҙә ғәйепле, тимәйем). Һәр хәлдә, мин үҙемде шулай һиҙәм...

Тормош ауырлыҡтарын яңғыҙы еңергә өйрәнгән кеше булараҡ, Зиннур Ғәзиз улы был юлы ла бирешмәҫкә тырышты. Институтта эшләүен дауам итте. Унда үткән сараларҙа ҡатнаша йөрөнө. Ундай саҡта уның ҡайҙа ултырғанын, бүлмәләрҙең ишектәре ябыҡ саҡта ла, ғәҙәттәгесә сытырлата көлөүенән институт коридорының арғы осонда йөрөгән килеш тә белеп була ине. Тик кисәләрҙә элеккесә бейей генә алманы. Әммә ундай көн тыуырына иманы камил ине уның. Быны мин иман килтергәндәй әйтәм. Сөнки уның хәлен телефон аша ла, йортона барып та белешә йөрөлдө. Һуңғы осрашҡанда (хәйер, уны һуңғы тапҡыр булыр, тип кем уйлаған инде!):

— Ҡасан бейей башлайбыҙ инде? — тинем уға, шаяртып ҡына.

— Ундай көн тыуыр, Алла теләһә, бейербеҙ, бейешербеҙ. Врачтар әйтеүенсә, инсульттан һуң өс йыл имен үтһә, кеше мал була, ти. Шөкөр! Өс айҙы үткәрҙем инде, — тигәйне. Шул осрашыу ваҡытында "Һикәлтәләр" (2006) китабын бүләк иткәйне. Унда шундай автограф яҙылған: "Әхмәт дуҫҡа, һабаҡташҡа, фекерҙәшкә. Яҡты теләктәр менән Зиннур, Венера Ураҡсиндар. 12.02.2007". Тағы-тағы осрашырға һүҙ ҡуйышып, хушлашҡайныҡ та ул... Кем уйлаған, шул хушлашыуыбыҙ, үкенескә ҡаршы, бәхилләшеүебеҙ ҙә булыр, тип...

* * *

"...Ырымбур өлкәһенең Төйлөгән районына ҡараған башҡорт ауылдарының береһен Мәҡсүт ауылы тип йөрөтәләр. Буласаҡ академик 1935 йылдың 5 ноябрендә ана шунда тыуған. Юшатырҙың һыуын эскән. Мөлкәмән тауын хыялдарына иш иткән. Тыуған төйәгенә ул мәңге ҡанмаҫ һағыныу хисе һаҡлай күңелендә. Ә ул хис уны сикһеҙ һөйөүҙән, хөрмәт итеүҙән генә килә. Шуға ла шул хис, тойғолар әҫәрҙәренә күсмәй ҡалмай. "Көлсә" тигән уймаҡ хикәйәһен Зиннур Ураҡсин шулай башлаған: "Уҡыуҙарымды бөтөрөп, ауылыма ҡайтып киләм. Арығанмын. Ике генә китап һалып алған муҡсайым да яурындарымды ҡырҡа. Мөлкәмән тауының түбәһе ҡыҙарып күренде лә инде. Ләкин әле байтаҡ ер атлайһы бар..." Миңә ҡалһа, был юлдарҙың авторы бөгөн дә юл өҫтөндә. Тик юл муҡсайында йөгө генә күпкә арта төшкән. Әммә ул һаман атлауында. Уймаҡ хикәйәһендә әйтелгәнде әҙ генә үҙгәртә биреп, уның үҙенә ҡарата: "Әле бик күп, бик күп атлайһы бар әле уға", — тиәһе килә! Иншалла, шулай булһын!" Бына шулай тип тамамлағайным Зиннур Ғәзиз улының сираттағы юбилейы айҡанлы яҙылған очергымды. Оло үкенесебеҙгә ҡаршы, хәҙер инде ҡасандыр ул эскән, кескәй сағында һыуында сәп-сәп иткән, балығын тотҡан Юшатыры менән хыялдарына иш иткән Мөлкәмән тауы уның үҙен һағыналыр, моғайын... Миңә ҡалһа, һикһәнен билдәләр йылды Юшатырҙың ныҡ тартылыуы йә ураҡкан уланын юҡһыныуҙан, һағынып илауҙан күҙ йәштәре бөткән әсәне хәтерләтә, Мөлкәмән тауының һарғайыуы — уны үтә лә һағыныуынандыр кеүек... Юҡ, ниңә "һымаҡ"лап торорға. Ысынында ла шулайҙыр. Шулай булғас, беҙ бәндәләргә ни һан!?

24.10.1995 й. — 20.10.2015 й.